# Башҡортостаным.

Мин тәбиғәте менән дан тотҡан, халҡыбыҙҙың сал тарихын, үҙенсәлекле көнитмешен хәтерләткән матур төбәктәрҙең береһе – Башҡортостан республикаһында йәшәйем. Тыуған ерем сикһеҙ гүзәл тәбиғәтле, легендаларҙа данланғанса ифрат бай тарихлы, үҙ еренә йәне – тәне менән изгелек ҡылған, алсаҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл халҡы менән мәңгелек.

Бөгөн Рәсәйҙең йөҙөк ҡашы булған Башҡортостандың тыуған көнө. Һәр кем тыуған көнөнә үҙенсә матур әҙерләнгән кеүек, республикам да үҙ байрамына ныҡлы әҙерләнә.Төрлө – төрлө спорт ярыштары, мәҙәни  саралар, уҡыусылар өсөн булған конкурстар ҙа ихтибарһыҙ ҡалмай. Бының турала радиоларҙан да, зәңгәр экрандарҙан да, ваҡытлы матбуғат биттәрендә лә бәйән ителеп барыла.

Бөгөнгө байра көнөндө лә үҙ телемдә радио тыңлай – тыңлай, күҙгө тәбиғәткә һоҡлана - һоҡлана өләсәйемә ҡунаҡҡа  китеп барабыҙ. Республикам һайлауҙарҙан һуң булған оло һөйөнөскә шатлана, яңы һулыш кисерә. Хәмитов Рөстәм Зәки улы президент булып ҡалыуына, киләсәгебеҙ маҡсатлы, яҡты булыуына ышана.

Мин дә Башҡортостаным тураһында ҡыҙыҡһынам, ғорурланам, үткәне – киләсәге тураһын да уйланам. Татлы хыялдарымды бер уй бүлде: ”Башҡортостаныма ла – 14, миңә лә 14 йәш тула”.

Был уйҙарҙы ҡат-ҡат уйлай торғас, өләсәйемдәргә килеп еткәнебеҙҙе һиҙмәйҙә ҡалдым. Ҙур булмаған, әммә изгелек нурына күмелгән ябай башҡорт өйөндә өләсәйем һандығын рәтләп ултыра  ине. Мин уның төпкә батҡан уйсан күҙҙәренә бағып, күңелем түрендәге һорауҙарымды бирҙем.

- Өләсәй, һин дә Башҡортостан байрамы тураһында уйланып ултыраһыңмы.
- Шулай балам. Үҙ тәбиғәтемә, үҙ мөхитемә төрөнөп ғүмер юлымды туҡһанынсы тиҫтәһен ваҡлайым мин.
- Ысынлап та өләсәй, кешенең тәбиғәткә, тәбиғәттең кешегә хеҙмәт итеүе һинең йөҙөңдә асыҡ тойола.
- Ҡыҙым тәбиғи хозурлыҡҡа был ерлектә йәшәгән халыҡтың үҙенсәлекле сифаттары ҡушылғас, матурлыҡ гармонияһына һоҡланмау мөмкин түгел шул. Ана шул ябайлыҡ, изгелек, гүзәллек һәм дә батырлыҡ менән ныҡышмалылыҡ йәшәтә лә инде беҙҙе.

Өләсәйемдең был мәғәнәле һүҙҙәрендә үҙ йәшенә кинәнес, Башҡортостан киләсәгенә  ышаныс асыҡ сағылды.

Эйе, беҙҙең республика – бай тәбиғәте менән дан тотҡан рухыбыҙ сәңгелдәге, эпостар үҙәге, башҡорт халҡының ауыҙ – тел ижады гәүһәрҙәре төйәге, ысын мәғәнәһендә хазиналы, тарихи  бай һандыҡ.

Туҡта, туҡта... Башҡортостан – ул тарихыбыҙ һандығы тип ҡуйҙыммы мин?! Әллә өләсәйемдең семәрле һандығы минең фекеремде үҙгәртте, әллә хәҙер ҙур –үҫтем, ысынлап та, Башҡортостаным – үҙ ҡомартҡыларын ныҡлы һаҡлаған тарихи һандыҡ

булып күҙ алдыма килеп баҫты. Улай ғына ла түгел, был һандыҡ мине бер аҙ илһамландырып, әҫәрләндереп үк ебәрҙе.

- Балам, һандығымдағы тәмле күстәнәстәрем, изге сәләмдәрем 54 ейән-ейәнсәремә, бүлә бүләсәләремә, ҡатнаш ғаиләле дуҫ - иштәремә етмәле.

Уйым менән генә өләсәйемә яуап бирәм: “ Республикабыҙҙа 54 районбар һәм йөҙҙән ашыу милләт халҡы дуҫ йәшәй.!

- Эй ҡыҙым, гәүһәр таштарҙан үрелгән ынйыларым быуындан – быуынға күсә килде. Минән дә һиңә ҡомартҡы булып ҡалыр әле.

Уның һандыҡ эсенән һуҙып сығарған муйынсаҡтары, ҡулымда талғын бәүелгән, сылтыраған төҫлө булып, Башҡортостанымдың ярҙарына һыймай ярһып аҡкан йылғаларын, шишмәләрен, тоноп ятҡан күлдәрен хәтерләтә.

Һандыҡ ҡапҡасына олатайым мәрхүмдең ҡурайы, фото һүрәте матаур ғына итеп беркетелеп ҡуйылған. Ҡурай һаман да оҙон моңло көйҙө һуҙа төҫлө. Атайым ҡурайҙы алып, өҙҙөрөп уйнап ебәрҙе. Өй эсе лә, күңелемдәге илһамлыҡ та ҡурай моңона сорналды. Бына шулай, мин генә, минең халҡымды ғына ла түгел, ә сит илдәрҙе лә ҡурай үҙ моңо менән һоҡландыра.

- Ҡыҙым был төргәктәге яулыҡ, таҫтамалдарҙың да үҙ тарихы бар. Юҡка ғына бирмәнеләр уны миңә. Уҡыусыларым, хәҙер инде уларҙың уҡыусылары төрлө уңыштарға ирешеп, бөйөклөктәр яулаһас, ата – әсәләре аҡ ҡорбандар салдырып, аяттар уҡытып хәйергә өләшкән сауаплы байлыҡтар улар.

Эйе, тыныс күк йөҙөндә Башҡортостаным йондоҙҙары балҡып яналар, иркәләп емәлдәшәләр. Һауаға асыҡ күңел, оло ғорурлыҡ менән баҡһаң, йондоҙҙар көндөҙ ҙә балҡып яналар. Уйҙарым сағыштырыуҙарым оҙон юл тапты. Ана, халҡымды аң – белемгә әйҙәгән яҡтылыҡ йырсылары, тыныслыҡ бүләк иткән батырҙарыбыҙ, тос фекерҙәрен ижади сығанаҡ итеп бүләк иткән халыҡ шағирҙары, яҙыусылары, төрлө промышленность өлкәһендәге ғалимдар, моңло һандуғастар, дәртле бейеүселәр һәм мин белмәгән йондоҙҙар ҙа барҙыр тип уйлайым. Етегән йондоҙ - Башҡортостанымдың ете мөғжизәһе лә беҙҙең ғорурлыҡ.

Өләсәйем барлыҡ төргәктәрҙе барлап сыҡҡандан һуң, һандыҡты ябып ҡуйырға уйланы. Әммә бер нисә төйөнсөктө ул асырға ла уйламаны. Ә мин беләм, ул Башҡортостанымдың асылып бөтмәгән серле сере, мөғжизәһе.

- Әллә күпме ваҡыт үткәреп, һандыҡҡа ҡаҡ булып тик ултырҙыҡ. Мә ал ҡыҙым, был ҡиммәтле сағыу бирнәләрҙең береһен һиңә тип әҙерләгәйнем.

Эх, өләсәй... Һин генә үҙ ҡулдарың менән беҙгә бирнә әҙерләмәйһең, республикамдың да үҙ ҡулы менән етештергән бирнәләре бихисап.

- Бына шулай балам, һандығым үҙе лә, эсендәгеләре лә миңә бик ҡәҙерле.

- Туҡта әле, туҡта өләсәй! Баяғы ейәндәремә, бүләләремә тигән төргәгеңдән бер генә күстәнәсеңде ауыҙ иттер әле.
- Йәнтөйәгебеҙ тураһында күстәнәсле хәбәрҙәрем бар шул.

Тәү төйәгем – Әсә ҡуйыны булһа,

Башҡортостан минең һулышым!

Йән өргән бит гүҙәл тәбиғәтең,

Шуға изге минең булмышым!

Өләсәйемдең шиғри күстәнәсе ҡайһылай тәмле булды. Үҙ төйәгем тураһында миндә шулай уйлайым. Башҡортостан!.. Ҡайһылай матур һүҙ. Юҡ һүҙ генә лә түгел, ә ғорур яңғыраған, Урал тауҙаранда урынлашҡан, изге тыуған ерем. Халҡыбыҙҙың сал тарихын, үҙенсәлекле көнитмешен хәтерләткән изге төйәгебеҙ – Башҡортостан тураһында мин дә белгәндәрем тураһында һөйләп үткем килә. Беҙҙең республика гүзәл тәбиғәте, легендаларҙа данланғанса ифрат бай, тарихлы үҙ төбәгенә йәне – тәне менән фиҙа ҡылған, матур күңелле, алсаҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл халҡы менән мәңгелек. Мәңгелек сөнки, халҡым бер ваҡытта ла, үҙ тарихын онотмаған. Мәңгелек сөнки, башҡортом бер ваҡыттала үҙ милләтен, телен сит күрмәгән.

Халҡыбыҙ элек – электән кешелек тормошонда тоткан урынын юғары баһалаған. Телде яҡшы белгән замандаштарын данлаған, уларҙан үрнәк алырға саҡырған, һүҙҙең, телдең тәрбиәүи көсөн урынлы ҡулланырга өйрәткән. Ысынлап та, туған телде яратыу – Тыуған илде, әсә – атаны яратыу менән бер. Юҡҡа ғына туған телде – әсә теле тип йөрөтмәгәндәр шул. Телдең иң төп үҙенсәлеге – милләт үҫешенә ҡайтып ҡала. Кешелек тормошонда килеп тыуған ауыр мәлдәрҙә тел ярҙамында сетерекле мәсьәләләр, бәхәстәр хәл ителгән .Ауыр яу мәлдәрендә, илебеҙгә дошман аяғы баҫҡанда, йыйындарҙа атаҡлы сәсәндәребеҙ ошо туған тел ярҙамында мөрәжәғәт иткәндәр, ил һаҡларға саҡырғандар, батырлыҡҡа рухландырғандар, татыулыҡҡа, изгелеккә өндәгәндәр. Телебеҙ халыҡты бер бөтөн итеп ойошторған, уның кемлеген бар донъяға таныҡкан, башҡа милләт халҡы менән аралыштырған. Милләттәр, дәүләттәр араһында изге юл – дуҫлыҡ юлы һалған, илһөйәрлекте яҡлаған һәм данлаған.

Туған тел – ата – бабаларыбыҙҙан ҡалған рухи мираҫыбыҙ, байлығыбыҙ, булмышыбыҙ.

Гузәл Башҡортостаныбыҙҙың булмышы ул ғына ла тугел. Изге төйәгебеҙҙең йәшәйешен төрлө өлкәлә матур биҙәгән тырыш халҡымды, Башҡортостан ынйылары булып янған яҡты йондоҙҙарҙы, мәңгелек дан һаҡлаясаҡ милле батырҙарҙы, йырланасаҡ оҙон көйҙәрҙе Уралтауҙары йөҙөндә күрергә була. Ошо хозур тәбиғәт ерлеге тыуған еремә күпме бөйөк шәхестәр бүләк иткән. Беҙҙең ерҙә генә иң талантлы мәҙәниәт, әҙәбиәт, фән, хужалыҡ өлкәһендә халыҡ исемдәре яулаған ихлас ғорурланырлыҡ ил инәләре – ағалары бар. Уларҙың береһен дә айырып телгә алып булмай. Сөнки гәүһәр таштарының барыһы ла матур.

Бер уҡыусының Башҡортостан тураһындағы яҙмаһында ла, шул фекер сағыла:

«- Уралтау... Мең төрлө сәскә, ҡош тауыштары, шишмә сылтырауы, һыҙылып ал таң атыуы, алһыуланып шәфәк һыҙылыуы, әллә ниндәй сихри биҙәктәр яһап, болоттар йөҙөүе - бөтәһе лә мине һоҡландыра. Ошондай сихри гүзәллек батшалығында тыуыуыма, йәшәүемә шатланам да, ғорурланам да».

Эйе, мин дә был һүҙҙәргә ихлас ҡушылам. Мин үҙ телемдә уҡый – яҙа беләм, иркен һөйләшә алам. Бының өсөн ҡасандыр киләсәк быуынды ҡайғыртҡан, беҙҙең өсөн яҡты көндәр бүләк иткән халҡыма оло рәхмәтлемен. Башҡортостан ерлеге генә көйһөҙҙәрҙе моңло итә ,һүҙһеҙҙәрҙе телле итә, һөнәрһеҙҙе оҫта итә, ҡурҡаҡтарҙы батыр итә. Шулай итеп, төйәкһеҙҙе илле итә.

Башҡорт халыҡ ижадының ҡайһы ғына әҫәре менән танышмайым, әлеге һүҙҙәремә дәлиллек табам. Изге төйәгемдең таҙа, саф һауаһы ла, иркен, киң, уңышлы ере лә, ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары ла минең булмышымды байыта. Шәжәрә ағасы булып, тамырымды нығыта, киләсәгемде йәшәтә.

Башҡортостанымдың бөтмәҫ – төкәнмәҫ мөғжизәләрен иҫәпкә алмай тороп, тыуған ер төшөнсәһен аңлау бик яҙыҡ булыр. Илгенәмдең тәбиғәт мөғжизәләре лә, онотолмаҫлыҡ тарих, юйылмаҫлыҡ сағыу биҙәк.

- Күстәнәс тәмле лә, әҙ ҙә була шул. Әле Башҡортостаным тураһындағы күстәнәстең иң тәмлекәстәрен тәмләнек.

Ҡулындағы һандыҡ асҡысын ҡайҙа ҡуйырға ла белмәгән өләсәйем, күпте күргән ҡулдары менән башымдан һыйпап, йылы ҡуйыйнына ҡыҫып ҡосаҡланы. Өләсәйемдең ҡулдарының йылыһын тойоп, мин тағы ла дәртләнәм, үҙемдә рухи көс табам.

Был бит ябай һандыҡ асҡысы түгел, ә Башҡортостан халҡының “тормош асҡысы”.

Ул әлбиттә, үҙ хужаһын тапты, һайлауҙар уңышлы үтте. Мөғжизәле тарих һандығының асҡысы быуындар күсәгилешлеге иенән йәш быуынға тапшырыла барыр. Башҡортостан үҙенең ғорур исеменә тап төшөрмәҫ. Матур республикамда татыу, дуҫ булып йәшәгәндә, тырышып яҡшы уҡығанда, тәрбиәле, иманлы уҡыусылар булғанда ғына изге төйәгебеҙ бер ваҡытта ла үҙ бәрәкәтен юғалтмаҫ. Киреһенсә сәскә атыр. Изге төйәгебеҙҙең нурын ебәрмәйек!

Ҡалмурзина Нәркәс 8А класы уҡыусыһы